Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

**«Селлә бабайҙың бейәләйе»**

**темаһынадәрес конспекты**

**(өлкән төркөм)**

**Әҙерләне:**

**Сыңғыҙова Л.Ф.**

**Шамонин ауылы – 2021й.**

Геоэкшен ысулын ҡулланып өлкәндәр төркөмөндә экология буйынса дәрес.

**Тема "Селлә бабайҙың бейәләйе"**

**Балалар эшмәкәрлеге:**

- дидактик уйындар һәи күнегеүҙәр.
- комуникатив - берләшеп эшләргә булышлыҡ итеү.
- сәйәхәт хәрәкәттә алып барыла.
- фольклор өлгөләрен (йомаҡ ,әкиәт)үҙләштерә алыу.

**Бурыстар:**

**Белем биреүсе** - балаларҙың ҡышҡы тәбиғәт күренештәре, тәбиғәттәге үҙенсәлекле Үҙгәрештәр, флора һәм фаунаның төрлөлөгөн аңларға булышлыҡ итеү.телмәрҙе яңы һүҙҙәр ,фразалар менән байытыу.

**Үҫтереүсе -** логик фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, балаларҙы үҙ - аллы килешеп, коллективта эшләргә, аралашырға, картала, схеманы аңларға булышлыҡ итеү.

**Тәрбиәләүсе** - интеллектуаль эш төрөнә ҡыҙыҡһыныуҙы һүндермәү, маҡсатҡа ярашлы ынтылып уйнау теләге тыуҙырыу, күмәк уйындан шатлыҡ тойғоһо кисереү.

**Эшләү ысулдары:**

- әңгәмә,
- ҡаршылыҡлы хәл булдырыу,
- уйынға ҡыҙыҡлы ылыҡтырыу.

**Уйын барышын ойошторoу:**

- һүҙле ысулдар - әңгәмә, һорауҙар, аңлатмалар биреү;
- күргәҙмә ысулдар – һүрәттәр, карточкалар, слайдтар;
- уйын ысулы - дидактик уйындар һәм күнегеүҙәр.

**Интеграция** - телмәр үҫтереү, социаль коммуникатив, тапып белеү эшмәкәрлеге бер береһе менән үҫешеп бара.

**Йыһазландырыу** – аудиояҙма, карта, дидактик уйындар, ҡар темаһына пазлдар,

кипкән үҫемлектәр, слайдтар, бейәләй, һүрәттәр, телеграмма.

**Дәрес барышы**:

**Тәрбиәсе:**

- Балалар, мин һеҙгә йомаҡ ҡоям, ә һеҙ яуабын табығыҙ: - Матур апай һыуға бара, тәңкәләре ҡойолоп бара. Нимә ул?

**Балалар:** -Ҡар.

**Тәрбиәсе:** - Дөрөҫ, быйыл тышта шул тиклем ҡар күп. Ә беләһегеҙме, күп итеп ҡарҙы беҙгә кем яуҙыра? (балаларҙың яуаптары )

- Селлә бабай. Ул беҙҙең башҡорт ҡыш бабайы (һүрәт күрһәтеү). Бына, балалар, бөгөн Селлә бабайҙан телеграмма килеп төштө."**Мин Башҡортостан еренә ҡар һибеп йөрөгәндә, минең күк кенә бейәләйем һеҙҙең баҡсаға төшөп ҡалды. Зинһар, табып бирегеҙсе".**

-Балалар, Селлә бабай беҙгә "Аҡбуҙат"балалар баҡсаһының картаһын да ебәргән. Картаға ҡарағыҙ әле, Селлә бабайҙың бейәләйе күренмәйме?

**Балалар:** - Бына спорт майҙансығында ята.

**Тәрбиәсе:** - Эйе, мин дә күрәм. Ләкин бөтә ерҙе ҡар ҡаплаған. Ҡарҙы беҙ төрлө ҡаршылыҡтар аша, ҡарҙы көрәп барасаҡбыҙ. Беҙгә был ҡаршылыҡтарҙы үтергә беҙҙең балалар баҡсаһының тәрбиәселәре ярҙам итәсәк. Уларҙың уйын майҙансыҡтарына барайыҡ әле.

**1. Бал корттарының** майҙансығы.

**Тәрбиәсе:** - Был майҙансыҡта ла иң кескәй балалар йөрөй, улар ҡар бабайҙар ҙы йыйып биреүегеҙҙе һорайҙар, ҡар туптары яһағандар, ләкин матур итеп йыя алмағандар. (ҡайһы ҡар бөртөгө артыҡ?)

**Дидактик уйын “Киҫмә һүрәттәр**”

**2. Сулпылар төркөмө**.

**Тәрбиәсе:** - Сулпылар төркөмөнә кемдәр йөрөй икән? (әлбиттә, беҙҙең балалар)

**Дидактик уйын"Бер һүҙ менән әйт"**

**Тәрбиәсе:** - Ҡуян, төлкө, бүре, болан ...

**Балалар:** - ҡырағай хайуандар.

**Тәрбиәсе:** - Шыршы,имән ,ҡайын ...

**Балалар:** - ағастар.

**Тәрбиәсе: -** Бейәләй, тун, башалтай, кофта ...

**Балалар:** - кейемдәр.

**Тәрбиәсе:** - Афарин, был ҡаршылыҡты ла үттек.

**3. Тамсылар төркөмө.**

**Тәрбиәсе: -** Тамсылар ҡыш булғас нимәгә әйләнәләр?

**Балалар: -** Ҡар бөртөктәренә .

**Тәрбиәсе:** - Улар беҙгә бейәләйҙәрен парлап биреүҙәрен һорайҙар.

**Дидактик уйын "Парын тап "**

**Тәрбиәсе:** - Тағы бер көрттө үттек.

**4. Әкиәт төркөмө.**

**Тәрбиәсе: -** Улар беҙгә викторина әҙерләгән.Ҡуянды төлкө өйөнән ҡыуып сығарған. Был ниндәй әкиәт?

**Балалар:** - Ҡуян өйө.

**Тәрбиәсе:** - Кай һәм Герда тәҙрәнән буранды ҡарарға ятаҡандар.

**Балалар:** - Ҡарлы королева.

**Тәрбиәсе:** - Был бәләкәй генә әйбер эсенә бик күп хайуандар һыйған.

**Балалар:** - Бейәләй әкиәте .

**5. Ҡояшҡайҙар төркөмө**

**Тәрбиәсе: -**.Был төркөмгә иң бәләкәс балалар йөрөй. Улар ҙа беҙгә уйын әҙерләгәндәр.

**Дидактик уйын "Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр**".

**Тәрбиәсе:** - Бәпестәр аҙашҡан. Әсәйҙәрен табып, исемдәрен әйтегеҙ (һыйыр, ат, һарыҡ, кәзә, эт, бесәй – быҙау, ҡолонсаҡ, бәрәс, көсөк).

**6. Йәйғор төркөмө**.

**Тәрбиәсе: -** Йәйғор төркөмө безгә ҡар өйөп ҡуйған.тиҙ генә уларҙы дөрөҫ итеп йыйайыҡ та, юлыбыҙҙы артабан дауам итербеҙ.

**Дидактик уйын "Киҫмә ҡар бөртөктәре".**

**7. Йондоҙсоҡтар төркөмө.**

**Тәрбиәсе: -** Улар, вәт афариндар, тағараҡтар элеп бөткәндәр, ошо тағараҡтарға ҡоштарҙың исемен әйтеп ултыртайыҡ әле.

**Дидактик уйын "Ҡоштарҙы ашат".**

**8. Аҡ сәскә төркөмө.**

**Тәрбиәсе: -** Был төркөм безгә кипкән дарыу үләндәре әҙерләгән, ул үләндәр ни өсөн кәрәк? Үләндәрҙе эсеү һәйбәтме, әллә насармы ? (балаларҙың яуаптары)

**Дидактик уйын "Нимә юғалды?"**

**Тәрбиәсе: -** Балалар беҙ ҡаршылыҡтарҙы үтеп бөттөк, спорт майҙансығына Юлланайыҡ, бына ята ул Селлә бабайҙың бейәләйе. Уның эсендә бер нимә бар Буғай, күстәнәс һалған шаян бабай. Һеҙгә нимә оҡшаны, нимә оҡшаманы? Һеҙ бейәләйҙе тапҡанға шатһығыҙмы? Афариндар! Мин бейәләйҙе Селлә бабайға бирермен.